# Мәүлит Ямалетдиновтың
# « Һуңғы йот» повесында халыҡ ижады жанрҙары  һәм
# һүрәтләү саралары.

- Башҡарҙы : Илсе урта мәктәбенең  8-се класс уҡыусыһы Шәһивәлеева Алһыу .
- Етәксеhе: башҡорт теле hәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Солтанова рәмилә Тәлғәт ҡыҙы.



Шағир,прозаик,драматург, тәржемәсе,педагог,
ҡурайсы, йырсы, сәсән

Мәүлит Ямалетдинов

Учалы районы Аһылай ауылында тыуған

**Фәнни-тикшеренеү эшенең маҡсаты**

1.М.Ямалетдиновтың тормош һәм ижад юлы менән танышыу.
2. Яҙыусының “Һуңғы йот ”повесында халыҡ ижадының бер төрө булған мәҡәл,әйтем, халыҡ йырҙарын ҡулланыуын билдәләү.
3 Повеста һүрәтләү саралары бирелешен күҙәтеү.
4.М.Ямалетдиновтың ижадының әһәмиәтен күрһәтеү

**Фәнни-тикшеренеү эшенең бурыстары**:

1.М.Ямалетдинов хаҡында мәғлүмәт алыу.
2.Яҙыусы ижады менән танышыу.
3.Әҙиптең “Һуңғы йот ”повесын уҡыу.
4.Әҙәбиәт теорияһын өйрәнеү.
5.Интернет селтәренән кәрәкле мәғлүмәттәр туплау

**Гипотеза.**

Мәүлит Ямалетдинов ижады-халыҡсан ижад

**Тикшеренеү объекты**

Илсе урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты

**Тикшереү предметы.**

1991 йылда Өфө Башҡортостан китап нәшриәтендә башҡорт телендә баҫылған "Тал бәпкәләре" исемле китаптағы "Һуңғы йот " повесы

**Фәнни-тикшеренеү эшенең актуаллеге.**
Яҡташ яҙыусы М.Ямалетдинов ижадын өйрәнеүҙе иң кәрәкле сара тип таптым. Унын ижадының тәрәнлеген өйрәнеү- проблема булып тора

**Эштең структураһы**

Тикшеренеү эше инештән, ике бүлектән торған төп өлөштән, йомғаҡлауҙан, ҡулланылған әҙәбиәттән тора.



- М.Ямалетдинов тыуған Аһылай ауылы







# Белем ала:

- Учалы районының Аһылай, Баттал, Яңы Байрамғол, Ҡаҙаҡкол, Килмәк, Миндәк мәктәптәрендә;
- 1964-1968-Өфө музыкаль-педагогия училищеһында ;
- 1985-1987-Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институты эргәһендәге Юғары әҙәби курста;
- 1998-2001-БДУ-ның журналистика һәм филология факультетында .



# Хеҙмәт юлы.



- Баймаҡ мәктәп-интернатында музыка уҡытыусыһы
- Сибай ҡалаһы мәктәп-интернаты
- Иҫке Сибай балалар музыка мәктәбе
- Уральск ҡасабаһында балалар музыка мәктәбе
- Учалы ҡалаһында балалар музыка мәктәбе
- Учалы музыка мәктәбе һәм музыка училищеһы
- “Ирәмәл” башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе
- Учалы яҙыусылар ойошмаһының тәүге сәркәтибе
- “Өлкәр “альманахының мөхәррире
- “Ватандаш”журналының баш мөхәррир урынбаҫары
- Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы Ҡоролтай секретариатында хоҡуҡи акттарҙы тәржемә итеү , сығарыу мөдире
- “Ағиҙел”журналының проза бүлеге мөдире
- 2003 йыл- профессиональ яҙыусы




# Ижад емештәре:







- 1978 -”Ирәмәл”исемле тәүге шиғри йыйынтығы.
- 1981-”Ай ҡыҙы”.Шиғырҙар.Әкиәт.
- 1986-”Таң йондоҙо”Шиғырҙар
- 1988-”Һомай ҡош”.Шиғырҙар.Поэма.
- 1991- “Тал бәпкәләре”.Повесть.Хикәйәләр.
- 1992-”Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым”Повесть.
- 1994-”Һыҙҙырт әле ҡурайыңды!”Методик ҡулланма.
- 1996-”Һаумы,зәңгәр һауа!”
- 1999-”Бүләк”Повестар.Хикәйәләр
- 2002-”Ҡөрьән”.Шиғри тәржемәләр.
- 2003-”Сүрәи әл-Баҡара”Шиғри тәржемә
- 2005-”Өҙҙөрт , ҡурай, йөрәк ҡылдарын”Методик ҡулланма.
- 2007”Ҡуласа”Роман-эссе
- 2013-”Һайланма әҫәрҙәр”1 том. Шиғырҙар.Поэмалар












# Хеҙмәтенең баһалары

- 1993-”Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре” тигән маҡтаулы исем.
- 2004-”Салауат йыйыны”байрамының сәсәндәр бәйгеһе лауреаты
- 2004-ул төп ролде башҡарған “Ночью можно” фильмы Халыҡ-ара фестивалдә 1-се дәрәжә диплом
- 2005-шул уҡ фильм Ҡазанда “Алтын мөнбәр” кинофестивалендә призға лайыҡ була
- “Башҡортостан Республикаһына тынғыһыҙ хеҙмәте өсөн”билдәһе менән наградлана
- 2016 –М.Буранғолов исемендәге премия лауреаты
- М.Мортазин исемендәге премия лауреаты



“Һуңғы йот”повесында
халыҡ ижады жанрҙары һәм
һүрәтләү саралары

- **Фәнни-тикшеренеү эшенең планы**.
- 1.М.Ямалетдинов томош һәм ижад юлы хаҡында.
- 2. Мәүлит Ямалетдиновтың “Һуңғы йот” повесында халыҡ ижады жанрҙары һәм һүрәтләү саралары :
- а) мәҡәлдәр һәм әйтемдәр;
- б) халыҡ йырҙары;
- в)фразеологизмдар;
- г)әҫәрҙә эпитеттар
- д)метафоралар;
- е)йәнләндереүҙәр;
- ё)сағыштырыуҙар.
- 3.М.Ямалетдинов ижады- халыҡсан ижад.

**М.Ямалетдиновтың “Һуңғы йот”повесы** – икмәккә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү өсөн бик уңышлы әҫәр.Ә икмәккә , ризыҡҡа изге мөнәсәбәттә булыу-борондан килгән бурысыбыҙ.Был повесть беҙҙе аҙыҡ-түлекте әрәм-шәрәм итмәҫкә, һаҡсыл булырға, бер-береңә ярҙамсыл, егәрле булырға кәрәк тип өйрәтә. Мин әҫәрҙең сюжетын ғына түгел, ә авторҙың повесты ижад иткәндә, халыҡ ижадының иң йыш ҡулланылған жанрҙарының береће-мәҡәл һәм әйтемдәрен ҡулланыуын өйрәндем . Повеста байтаҡ мәҡәл һәм әйтемдәр яҙыусының әйтер фекерен тәрәнерәк , уҡыусы күңеленә ныҒыраҡ еткереү өсөн ҡулланылған,тип иҫәпләйем

- **Нимә һуң ул мәҡәл**? Халыҡ ижадының бер жанры:ысынбарлыҡтағы төрлө күренештәр тураһында ҙур тормош тәжрибәһенән сығып әйтелгән, ыҡсым формалы һәм тәрән мәғәнәле , тапҡыр һәм образлы һүҙбәйләнеш
  **Нимә һуң ул әйтем?**Ниндәй ҙә булһа берәй тормош күренешен үткер һәм образлы итеп тамғалаусы һәм халыҡ араһында киң таралған һүҙбәйләнеш.
  Бына ошо күренештәрҙе мин яҙыусы ижадында өйрәндем, таптым да инде

# М.Ямалетдиновтың “Һуңғы йот” повесында мәҡәлдәр, әйтемдәр

- Алмағасты алмас менән киҫәләр. (84-се бит.)
- Ауырыу китһә лә , ғәҙәт китмәй.(80-се бит.)
- Бирәм тигән ҡолона  һалып ҡуйған юлына. ( 64-се бит.)
- Йыландың тешен һындырһаң да ағыуы ҡала.(96-сы бит .)
- Юл аҙабы- гүр ғаҙабы. (32-се бит.)
- Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ.(3-сө бит)

# “Һуңғы йот” повесында халыҡ йырҙары.

- Ҡурайҙы ла нисек тарталар икән,
- Ун бармаҡкайҙарын тулатып.
- Тыуған илдән нисек китәләр икән,
- Ата-инәкәйҙәрен илатып.
- (3-сө бит.)
- Бесән сапҡан ерҙәрем шул,
- Ураҡ урған ерҙәрем.
- Күк сәскәләй күкрәп ҡалды
- Тыуып үҫкән ерҙәрем.
- ( 33-сө бит.)
- Егет кенә булһаң , тәүәккәл бул,
- Тәүәккәллек етә һәр эштә.
- (110-сы бит.)

# Повеста фразеологизмдар бирелеше

- “Байҙаҡ менән Абдулла үҙ-ара тынышмайҙар, **борсаҡтары бешмәй, ахыры**”,- тигән һөҙөмтә яһаны Иҙелбай.  (Тынышмайҙар)(25-се бит)
- “Иҙелбайҙың **ауыҙынан һыуҙар ҡойолдо**.”(Ашағыһы килде).(25-се бит)
- **“Ҡыуанысы ташып барған**  Мәликәнең күңелендә **күтәренке хистәр уянды**” (Шатланған) (135-се бит

# Автор ижадында – эпитеттар

- Был **артыҡ** тамаҡты нәмәгә алып килделәр?-тип мығырланы. (25-се бит.)
- Һөйләүсенең **йомшаҡ** тауыш менән төпсөнөүе , үҙен йәлләп, хәленә инеүе малайҙың бәгерен бөтөнләй йомшартты.(108-се бит.)
- Бер аҙға урынлашҡан **ауыр тынлыҡтан** һуң Байҙаҡ үҙен бик тиҙ ҡулға алды.(114-се бит.)

# Метафоралар

- Ҡорманайҙың үҙендә лә **тимер** үҙәк, **таш** йөр әк түгел… ( 93-сө бит.)
- Дөрөҫөн әйткәндә, осоп киткеһе лә килеп тормай әле бик,аҫтағы **муйыл күҙҙәр** эргәһенә төшкөһө килә …(102-се бит)

# Яҙыусы ижадында йәнләндереүҙәр.

- **Күкһел төтөн ыҫланып бөткән таш түшәмгә бәрелеп**, өйөрөлөп йөрөй ҙә күрер күҙгә беленмәгән “мөрйәнән”-ҡаҡ егенән өҫкә һуҙыла. (32-се бит.)
- “**Шәмәргән күк** ҡот осҡос ауырлығы менән уның өҫтөнә **ишелде**”(94-се бит.)
- Әбабайҙың аҫтындағы **дала сайҡалып-сайҡала**…(104-се бит)
- Уның алдында **төндөң һоро юрғанын бөркәнгән дала йоҡомһорай**.(105-се бит.)

# Әҫәрҙә -сағыштырыуҙар.

- Башы әйләнеүҙән, хәлһеҙлектән бер талай күҙҙәрен йомоп ултырғас, мөғжизә өмөт **иткәндәй** күккә ҡараны.(3-ссө бит.)
- Ул билдәһеҙ сәбәп менән бик оҙаҡ боһанып торғандан һуң,**тыйыла алмай илаған** кешенең күҙ йәштәренә **оҡшаған**.(32-се бит)
- Эйе, уларҙың мөхәббәте йәшен **ялтырауығындай** баҙыҡ һәм ҡыҫҡа ғүмерле булды.(74-се бит.)

# Һығымта.

- Мин ,М.Ямалетдиновтың “Һуңғы йот” повесын өйрәнеп, әҙәбиәттә йөкмәткеһе , темаһы, идеяһы менән ҡиммәтле булған ижад икәненә инандым.
- Автор повесть жанрын ижад итеү менән бергә халыҡ ижадына ла һөйөү тәрбиәләй, онотола барған халыҡ мәҡәлдәрен, әйтемдәрен беҙҙең көнгә урынлы еткерә.
- Фәнни эшемдә яҙыусының “Һуңғы йот”повесында халыҡ йырҙарының теманы асыуҙа ҙур роль уйнауын билдәләнем. Йыр йөкмәткеләре шулай уҡ автор биргән һ әр бүлектең тәрән фәлсәфәле фекерен асыуға булышлыҡ итә.
- Әйтемдәр тормош тәжрибәһенән сығып ижад ителгән .Шулай уҡ яҙыусы теге йәки был күренеш, ваҡиғаны һүрәтләгәндә , фекер ебен әйтем менән йөпләй, нығыта, иҫбатлай.
- Фразеологизмдарҙы автор урынлы файҙалана. Һәр ваҡиға, күренеш ябай һөйләмдәр менән түгел, фразеологик берәмектәр менән көсәйтеп күрһәтә.
- Эпитет, метафораларҙы әҙип оҫта файҙалана. Шуға күрә һүрәтләнгән объектты күҙ алдына килтереүе еңел, аңлайышлы.Ул ғына ла түгел, үҙеңде шул ерҙә йөрөгәндәй хис итәһең
- Ижадсы повесында оҫта һәм урынлы итеп сағыштырыуҙарҙы ҡуллана. Геройҙарын, тәбиғәт күренешен, ваҡиғаларҙы,характерҙарҙы һүрәтләгәндә –дай,-дәй, ҙай,-ҙәй ялғауҙары,кеүек, һымаҡ, шикелле,төҫлө,гүйә һүҙҙәре менән бирә.
- Был фәнни эште башҡарып, миндә яҙыусы ижадына хөрмәт тойғоһо уянды. Әҫәрҙәренең уҡымлы, тәрән фекерле булыуын формалаштырыу өсөн әҙипкә ни тиклем халыҡ ижадын, һүрәтләү сараларын белергә , өйрәнергә кәрәклеген аңланым.
- Шулай итеп,М.Ямалетдинов ижады -ысынлап та халыҡсан ижад